*Ләлә* ***БЕЙЕШЕВА***

Күренекле башҡорт тел белгесе, тюрколог
Әкрәм Бейешевтың тыуыуына 90 йыл

# Изге кешенән изге эш ҡала



*Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешев*

Күренекле ғалим, тәржемәсе, яҙыусы, үткер политолог Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешев 1926 йылдың 16 апрелендә Күгәрсен районы Туйөмбәт (Байулы) ауылында уҡытыусы ғаиләһендә донъяға килә.

Атайым Ғибаҙулла Абдулла улы Бейешев — заманының алдынғы уҡытыусыһы, тынғы белмәҫ йәмәғәт эшмәкәре, тарихсы һәм крайҙы өйрәнеүсе ине. Ул үҙенең балаларына ғына түгел, үҙе уҡытҡан һәр балаға эскерһеҙ уҡытыусы, тәрбиәсе була белде. Үҙ балаларын юғары белемле кешеләр итеү өсөн генә түгел, ә ысын кеше — халҡының ышаныслы улдары һәм ҡыҙҙары булып үҫеүгә ҙур көс һалды. Ул беҙҙе бигерәк тә үҙенең эшкә, донъяға ҡарашы, халҡына мөнәсәбәте өлгөһөндә тәрбиәләне. Әсәйем Миңлебикә Әбделғалим ҡыҙы бәләкәй саҡта һөйләгән ҡарһүҙҙәре, боронғо йырҙар аша беҙгә күңел нескәлеге, халҡыбыҙ батырҙарына ҡарата һөйөү тойғоһо һалды, үҙенең эшһөйәрлеге, бөхтәлеге менән ысын кеше була белеү сифаттарын бирә алған ысын әсәй ине. Беҙ атай-әсәйемдең ышаныһын, өмөттәрен аҡланыҡ, шикелле.

Һәр кеше үҙ ғүмерен үҙенсә ҡора, үҙенсә йәшәй. Тик йәшәүҙең мәғәнәһе ғүмер оҙонлоғо менән түгел, ә фани донъяла халҡың өсөн файҙалы эш башҡарыуың менән баһалана. Бөтәһенә ла халыҡ шаһит. Ул үҙ фекерен тура әйтә ала: яҡшылыҡҡа бөтмәҫ рәхмәтен белдерһә, яуызлыҡҡа нәфрәтен дә йәлләмәй. Әкрәм ағай үҙенең бөтә ғүмерен халҡына тоғро хеҙмәт итеүгә бағышланы, халҡы хаҡына һанап бөткөһөҙ хеҙмәттәрен ҡалдырҙы. Сөнки ул тик халҡы өсөн йәшәне, эшләне.

Мин халҡымдың ҡара ҡоло булып,
Эшләр өсөн үҫтем бишектән, —

ти ул бер шиғырында. Был уның йәшәү девизы булды.

Мин, һылыуы, иҫләүемсә, һәр эште ул ентекләп, еренә еткереп эшләр ине. Уның өсөн эштең вағы-эреһе булманы, һәр нәмәгә етди тотонор ине. Хатта иҙән һепереүҙе лә (бәләкәй сағында) ҙур ихласлыҡ менән башҡарып, беҙҙе лә шуға өйрәтә торғайны.

1941 йылдың яҙында ул 9-сы класты тамамланы һәм көҙөн 10-сы класҡа барырға тейеш ине. Әммә ныҡ ауырып китеү сәбәпле, мәктәпкә бара алманы. Ошо уҡ йылдың ноябрь айында булһа кәрәк, ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәптә уҡыта башланы. Ә инде 1943 йылдың көҙөндә армияға алынды. Һәм 7 йыл хеҙмәт иткәндән һуң, 1950 йылдың август аҙағында Өфөгә ҡайтып төштө. Хәрби часта офицерҙар өсөн асылған киске мәктәптә уҡып, мең төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, 10-сы класты тамамлап, аттестат алды. Ләкин юғары уҡыу йорттарына имтихандар биреү ваҡыты үткәйне инде. Шул сәбәпле ул “Совет Башҡортостаны” гәзитенә, әҙәби бүлеккә эшкә урынлашты. Ә кистәрен Мәскәү дәүләт университетына мотлаҡ инеү өсөн имтихандарға әҙерләнеүгә йүнәлтте.

Имтихандарҙы ул тик бишлегә генә биреп, атҡа менгәндәй булып ҡайтты — уның юғары уҡыу йортона инеп уҡыу теләге тормошҡа ашты. Ләкин “Совет Башҡортостаны” гәзите мөхәрририәте быға бигүк риза булмай, сөнки әҙ генә ваҡыт эсендә лә Әкрәм ағайҙың эшкә һәләтлеге, яуаплы мөнәсәбәте, тел байлығы, яҙыу оҫталығы күптәрҙең иғтибарын әсир иткән була. Ләкин университеттан килгән телеграмма буйынса уны эштән ебәрәләр.

Шулай итеп, буласаҡ ғалим 1951 йылда Мәскәү дәүләт университетының филология факультеты көнсығыш телдәре бүлегендә уҡый башлай. Төрки телдәрен ныҡ өйрәнә. 1956 йылда университетты тамамлап, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эш башлай. Ошо институтта телсе-ғалим, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөүсе, төркиәтсе булып формалаша. Һәм үҙенең исемен донъя кимәленә күтәргән илленән ашыу фәнни хеҙмәт яҙа. “Ошо хеҙмәттәре араһында Ә.Бейешевтың “Төрки телдәренең беренсел оҙон һуҙынҡылары” монографияһы үҙенең фундаменталлеге менән айырылып, тюркология, алтаистика тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған эштәренең береһе булып тора, — ти институт директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисамитдинова, — тюркология фәнендә йөҙәр йылдар буйы ғалимдар араһында йәшәп килгән бәхәсте — беренсел оҙон һуҙынҡылар проблемаһын ошо монографияһында хәл итә Әкрәм ағай”.

Һәр халыҡтың йәшәйешенең иң төп өлөшө — тел. Ул аралашыу ҡоралы ғына түгел, халыҡты бар иткән оло көс. Шуға ла телебеҙҙе үтә лә ратҡанлығынан бер шиғырында ул:

Әсәйемде әсәй, илемде — ил
Үҙемде ир иткән — һин, телем.
Эйелмәҫ баш, тына белмәҫ йөрәк,
Йәшәр теләк биргән — һин, телем, —

тип өндәшә ул туған теленә.

Әкрәм ағай бөтә ғүмерен башҡорт теленең байлығын бар халыҡҡа күрһәтеү, уның гүзәллеген аңлатыу өсөн бихисап хеҙмәттәр ҡалдырҙы, телебеҙҙең башҡа телдәр араһында хаҡлы урыны булыуын, алмаштырғыһыҙ юғарылығын иҫбатлай алды. Тағы:

Минең телем үлер өсөн түгел
Йәшәр өсөн сыҡҡан донъяға, —

тип автор телебеҙҙең үлемһеҙлеген данлай, уға ышана.

1960 йылдарҙа Әкрәм Бейешев башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөү эшен башлай. Был уның күптәнге хыялы ине, эшкә ул ихлас тотона, эргәһенә эшлекле хеҙмәткәрҙәр йыя. Иң беренсе ул һүҙлек төҙөү ҡулланмаһы яҙа, картотека төҙөй, һүҙлек төҙөү принциптарын фәнни нигеҙҙә эшләй. “Шулай итеп, Әкрәм

ағай һүҙлек төҙөү темаһының етәксеһе, идеологы, тәүге аңлатмалы һүҙлектең тәүге мөхәррире була. Әлбиттә, ул инде яратҡан фонетикаһын, уйлаған докторлыҡ диссертацияһын да ситкә ҡуя. Ул һүҙлекте яратып, бөтә булмышын ошо эшкә ҡушып, янып-көйөп эшләне, сөнки телебеҙҙе иң киткес ярата ине, — ти Ф.Хисамитдинова. — Шулай итеп, Әкрәм ағай был һүҙлек менән халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән рухи байлығын киләсәк быуынға тапшырыу миссияһын тулыһынса үтәп китте".




*"Башҡорт теленең һүҙлеге" — Әкрәм Бейешевтың иң ҙур хеҙмәте*

Был һүҙлек бөртөкләп йыйылып, ташҡа баҫылған халыҡ һүҙе — ошо халыҡҡа, уның теленә ҡойолған һәйкәл ул. Хеҙмәт тураһында уның менән бергә эшләгән коллегалары бына нимә ти.

"Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге телсе-ғалим Әкрәм Бейешевтың исеме менән туранан-тура бәйле. Ул һүҙлекте төҙөүсе телселәр менән башынан аҙағына тиклем (әҙер материалға етәксе булараҡ ҡул ҡуйып ҡына ултырманы) ысын мәғәнәһендә эшләне, йәғни һүҙлек фондына материал туплау, һүҙлектең төҙөү принциптарын эшләү, лексик статьялар төҙөү, уларҙы ултырыштарҙа, ғилми советтарҙа тикшереү, нәшер итеү һәм һуңынан нәшриәт мөхәррирҙәре менән бер фекергә килеп нәшерләүҙе үҙенә генә хас таҫыллыҡ менән атҡарып сыҡты. Был Әкрәм Ғибаҙулла улы өсөн титаник хеҙмәт була. Беҙ, төҙөүселәр, эште тырышлыҡ менән башҡарһаҡ та, Әкрәм ағайҙың бер нисә кеше төҙөгән һүҙлекте үҙе бер стилгә килтереп, система берлеген һаҡлап нәшерләүенә шаһитбыҙ... Бөтә беҙ эшләгән өлөштө ҡарап сыға, беҙҙең менән кәңәшләшә, фекер тупланғандан һуң хеҙмәт нәшергә бирелә, ә күп осраҡта ул, бер ҙә йыбанмай, кәрәкле һүҙгә өр-яңынан аңлатма яҙып, һүҙбәйләнештәр һәм миҫалдарҙың икенсеһен, нығыраҡ килешкәнен ҡуйып сығыр ине. Бындай хеҙмәт яуаплылыҡ ҡына түгел, уның үҙ һөнәренә бирелгәнлеген, теүәллеген, иң мөһиме — ғилем даирәһенең киңлеген күрһәтеүсе сифат булып тора... Был хазина ҡәҙерләп һаҡланып, ҙур ғалим үҙе теләгәнсә, халҡына, теленә оҙаҡ-оҙаҡ йылдар хеҙмәт итеп йәшәр, тип өмөтләнәбеҙ", — тип яҙа Зәкиә Ураҙбаева.

Һүҙлек быуат китабы тип баһаланды һәм был фундаменталь хеҙмәт 1993 йылда Мәскәүҙең "Русский язык" нәшриәтендә ҙур тираж менән баҫылып сыҡты.

Иң мөһиме — башҡорт әҙәби теленең фән донъяһында абруйын, бәҫен өр-яңы баҫҡысҡа күтәрҙе, телде өйрәнеүселәргә ҡиммәтле сығанаҡ булды ул.

Һүҙлек төҙөү өҫтөндә эшләү осоронда Әкрәм Ғибаҙулла улы бер үк ваҡытта төрлө ғилми эштәре, тел ғилеме тураһында әйтер һүҙен әйтә килде, ул матбуғат биттәрендә һәм рәсми документтарҙа сағылыш тапты, дәүеренең дәүләт кимәлендәге оло проблемаларын хәл итеүгә лә булышлыҡ итте. Күп миҫалдар араһынан башҡорт теленең орфографияһы тураһында һүҙем. Был хәл 80-се йылдарҙа була. КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында фән һәм уҡыу йорттары бүлегендә эшләгән Әхмәр Аҙнабаевтың иҫтәлектәренән күренеүенсә, республика етәкселәре орфографиялағы кәмселектәр, башҡорт теленә хас булмаған ҡағиҙәләр менән ризалашмай, башҡорт теле орфографияһын яңынан дөрөҫ ҡалыпҡа һалыу, башҡортса яҙыу ҡағиҙәләрен төҙөү бурысын Әхмәр Аҙнабаевтың тәҡдиме менән Әкрәм ағай Бейешевҡа йөкмәтәләр.

“Күп кенә һөйләшеп, төрлө дәлилдәр килтергәндән һуң Әкрәм ағай риза була һәм, бер-ике ай үттеме-юҡмы, яңы орфографияның ҡулъяҙмаһын минең алға килтереп тә һалды, — тип хәтерләй Ә.Аҙнабаев, ул ваҡытта обкомда 3-сө секретарь вазифаһын үтәүсе, — күп ҡаршылыҡтар аша яңы орфография ҡабул ителде. Шулай итеп, Әкрәм ағай Бейешев башҡорт теле орфографияһының яңы һәм һуңғы вариантын эшләп китте. Беҙҙең орфография ҡәрҙәш төрки телдәре орфографияһы араһында иң һәйбәте, еңеле, камиллашҡаны, сөнки уның ҡағиҙәләре төрки телдәргә хас булған сингармонизм законДарының бөтә үҙенсәлектәренә, талаптарына таянып, ысын мәғәнәһендә фәнни нигеҙҙә эшләнгән орфография ул. Бындай эште тик ул — Әкрәм Бейешев ҡына эшләй ала ине, сөнки ул телде үтә лә яратҡан һәм бөтә нескәлеген белгән оло телсе-ғалим булды”.

Ысынлап та шундай ине Әкрәм ағай. Уның тел тураһында яҙған мәҡәләләре, тел сафлығын һаҡлауға саҡырған мөрәжәғәттәре әленән-әле матбуғат биттәрендә һәм айырым китап булып донъяға сыға килде, улар бихисап. Башҡорт теле буйынса ғына түгел, башҡа төрки телдәрҙең грамматика һәм фонетика төҙөлөшөнә арналған мәҡәләләре лә етәрлек. Ғалимды һәр ваҡыт әҙәби телдәге етешһеҙлектәр борсор ине, шуға ул әҙәби телде дөрөҫ ҡулланмаған күп кенә яҙыусыларға, журналистарға, дәреслек авторҙарына ҡарата тәнҡит һүҙҙәре әйтә килде һәм үҙен борсоған мәсьәләләрҙе 1999 йылда яҙған “Тел хикмәттәре” китабында күтәреп сыҡты, аныҡ грамматик формаларҙы, лексик берәмектәрҙе әҙәби телдә боҙоп күрһәтеү фактларын, башҡорт теле ҡанундары күҙлегенән дөрөҫ ҡулланыу өлгөләрен юғары ғилми кимәлдә тикшереп күрһәтте. Был бик ҡиммәтле китап бөтә телселәр, журналистар, яҙыусыларҙың өҫтәл китабына әйләнергә тейеш. Әммә ул китапты бөгөн табыуы еңел түгел, уны яңынан ҙур тираж менән баҫтырып сығарыу талап ителә.

1990 йылдар... Буталсыҡ, аңлайышһыҙ осорҙа Әкрәм ағай халҡыбыҙ тарихын ныҡлап өйрәнеү һәм милли сәйәсәт мәсьәләләрен халыҡҡа аңлатыу өсөн 1993 йылда “Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше” тигән китабын баҫтырып сығара. Был китабында ул беренселәрҙән булып халҡыбыҙ тарихын дөрөҫ итеп күрһәтә һәм уның азатлыҡ көрәшенең маҡсатын аңлата, үҙбилдәләнеш өсөн көрәшендәге батырлыҡтарын тасуирлай, ғөрөф-ғәҙәттәрен, ерен, динен һаҡлап ҡорбан булғандарға дан йырлай. Башҡорт тарихына башҡорт күҙлегенән сығып дөрөҫ баһа биреүҙе төп маҡсат итеп ҡуя автор.

1995 йылда “Милләт һәм милли сәйәсәт” исемле китабы Мәскәүҙә урыҫ телендә нәшер ителә. Оло фекер эйәһе Әкрәм Бейешев тарихсылар һәм сәйәсмәндәр эшләп, әйтеп еткермәгән өлкәләрҙә тос та, ҡыйыу ҙа, үткер ҙә, нигеҙле лә фекерҙәрен әйтеүгә, уларҙы шул буталсыҡ дәүерҙә яҡлап сығырға баҙнат итте, көс тапты. 80-се йылдарҙың аҙағында, халҡыбыҙ тарихын әҙерәк хәҡиҡәт күҙлегенән сығып яҡтыртыу мөмкинлеге тыуғас, был эшкә Әкрәм ағай беренсе булып тотондо. “Инде фекер ҡоллоғонан, аҡыл ҡоллоғонан ҡотолорға ваҡыт, — ти автор. — Күренекле башҡорт ғалимы Ризаитдин Фәхретдиновтың “Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға бурыслы” тигән һүҙе бар, — ти ул артабан, — беҙ ҙә үҙебеҙ белгәнсә, аңлағанса, ысынбарлыҡта яҙырға тейешбеҙ”.

Әкрәм ағай ошо ике хеҙмәтендә башҡорт тарихы ғазап аяуһыҙ көрәш йылъяҙмаһынан ғибәрәт икәнлеген иҫбатланы. Был хеҙмәттәр тарих биттәре өсөн генә түгел, ә хәҙерге йәш быуынға мөрәжәғәт, аманат, хатта оран булып яңғырай. Шул уҡ 90-сы йылдарҙа башҡорт йәмәғәтселеге Башҡорт халыҡ партияһы (фирҡәһе) төҙөргә ҡарар итә. Һәм ул ҡатмарлы эште, йәғни партияның положениеһын (күрһәтмәһен), Уставын төҙөүҙе Әкрәм ағайға йөкмәтәләр. Ул тиҙ арала был документтарҙы ике телдә эшләп килтерә. Уставта башҡорт халҡының киләсәге нисек булырға тейешлеге, уның өсөн яңы фирҡә ниндәй эштәр башҡарырға тейешлеге күрһәтелгәйне. Партия төҙөлдө, әммә оҙаҡ йәшәй алманы. Теүәл, асыҡ эшләнгән устав менән арымай-талмай эшләү ҙә кәрәк булғандыр; бәлки, был тәнгәлдә ныҡышмалылыҡ етешмәгәндер етәкселәрҙә.

Профессор, күренекле яҙыусы Рәшит Шәкүр: “Әкрәм ағайҙың “Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше”, “Милләт һәм милли сәйәсәт” китаптарындағы әйтелгәндәр башҡорт халҡына ҡаршы йүнәлтелгән ҡара көстәргә төплө һәм асыҡ дәлилле яуап булып тора, — ти ул. — Әкрәм ағай Бейешевтың башҡорт халҡының аянyслы яҙмышын төптән аңлаған, халҡының тоғро улы булараҡ сығып яҙған хеҙмәттәре күптәрҙе таң ҡалдырҙы”.

“Милләт һәм милли сәйәсәт” китабы бығаса тарихта күҙәтелмәгән ҡыйыулығы һәм үтә лә ныҡ нигеҙле булыуы менән ул ваҡыттағы Рәсәй милли сәйәсәт министры Рамазан Абдулатиповтың да иғтибарын йәлеп итә, ул уға юғары баһа бирә, үҙенең ҡайһы бер аспиранттарына Әкрәм Бейешевтың ошо китабын файҙаланырға, башҡорт халҡы тарихын шул китапты уҡып өйрәнергә тәҡдим итә.

Татарстан Республикаһының беренсе Президенты Минтимер Шәймиев тә 2000 йылда үҙенең бер сығышында: “Әкрәм Бейешев тел ғалимы ғына түгел, тәрән белемле сәйәсмән, ғалим-политолог. Башҡорт халҡы бындай киң диапазонлы ғалимы менән ғорурланырға хаҡлы”, — тигәйне.

Әкрәм Ғибаҙулла улы тәрән белемле, күп яҡлы ғалим булды. Хаҡлы ялға сыҡҡас та ул тик ултырманы, яңынан эшкә сумды. 25 йыл буйы һүҙлек төҙөү менән шөғөлләнеп, эшләнеп бөтмәгән эштәренә тотондо. Тәрән хисле, моңло кеше булараҡ, ул йәштән үҙе өсөн генә әҙәби әҫәрҙәр ҙә яҙа килгән. Бына тигән шиғырҙар, хикәйә һәм хикәйәттәр ижад иткән, ләкин уларҙы баҫтырыу тураһында уйламаған да. Уның әҙәби ижадын ғилми һәм публицистик эшмәкәрлегенән айырып булмай. Әҫәрҙәрендә лә ул тура һүҙле, ихлас, туған телен, туған халҡын сикһеҙ яратҡан, уның бөгөнгөһө һәм иртәгәһе тураһында тәрән уйланған шәхес булып күҙ алдына килеп баҫа. 1956 йылда уҡ дүрт юллыҡ шиғырында:

Халҡым минең, йөрәк ярпым минең,
Зарым минең, йырым һин минең,

Һин булмаһаң, ней тип йәшәр инем,
Нимәм ҡалыр ине һуң минең?

Ә 1964 йылда:

Нисек үҙем тип йәшәмәк кәрәк,
Үҙеңдән ҙур халҡың бар була?
Үҙең өсөн йәшәү — әҙ ғүмерҙе
Һыуға һалыу менән бер була, —

ти. Әкрәм ағай үҙен тәржемә өлкәһендә лә күрһәтте. А.Пушкин шиғырҙарын тәржемә итте. Ә инде “Ҡытай хикәйәләре” китабының теле шул тиклем бай, әйтерһең дә китапты Әкрәм ағай үҙе яҙған. Хатта “Ҡөрьән Кәрим”де лә тәржемә итеп, халыҡҡа аңлайышлы һүҙҙәр менән еткерҙе. Ул инде 5-се тапҡыр нәшер ителде, китап кәштәләрендә ятмай, тиҙ тарала. “Белгән эшләй, белмәгән тешләй”, ти халыҡ мәҡәле. Шуныһы ҡыуаныслы — халыҡ яратып уҡый, сүрәләрҙең мәғәнәһен яҡшыраҡ аңлай.

Әкрәм ағайҙың балалар өсөн яҙған хикәйәләре оло тәрбиәүи көскә эйә. Әммә улар нәшер ителмәй ята.

Бөтә төрки телдәрен яҡшы белгән ғалим “Башҡорт телендә йөрөгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре” тигән хеҙмәт яҙҙы. Уны Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, үҙе вафат булғас, 2009 йылда донъяға сығарҙы. Был хеҙмәте лә телселәр өсөн бик ҡиммәтле.

Ил төшөнсәһе — киң төшөнсә. Уның эсендә бөтә тереклек: кешеләр, хайуандар, ҡоштар, үҫемлектәр донъяһы, йәғни йыһанды — илде бар иткән тотош бер мөғжизә ул. Был донъяны бөтөн булмышы менән сикһеҙ яратҡан Әкрәм ағайҙың ижадында үҙенә генә хас йылылыҡ, һоҡланғыс мөхәббәт менән яҙылған юлдар етерлек. Кешелек донъяһындағы ғилемдең йәшен тиҙлеге менән үҫә барыуының тотош тәбиғәткә, тереклеккә насар йоғонтоһон күреп көйә, хәсрәтләнә ул:

...Ә мин яратмайым шул кәнәриҙең
Шарманканан отҡан йырҙарын
Турғай сыҡылдауын артыҡ күрәм,
Сырлай ул тик ихлас моңдарын.

Йәки:

...Шул урманды ҡышҡы йоҡонан
Ауҙарҙылар ергә ҡырҡҡылап,
Яҙға сыҡҡас, башһыҙ түҙлектәрҙән
Ҡып-ҡыҙыл ҡан китте һырҡырап...

Әкрәм ағай бөтә тирә-яҡҡа бик иғтибарлы булды, яҡшыға ысын күңелдән шатлана белде, ә инде тигеҙһеҙлек, ялған, аҡылһыҙлыҡ, хаяһыҙлыҡ тынғы бирмәй ине уға, мин-минләшеү, булдыҡһыҙлыҡҡа көйөндө.

Нахаҡлыҡты хәләл көсө менән
Еңә алмаған был хаҡлыҡ.
Еңгәндә лә, уның үҙ эсенән
Өҫкә сыҡҡан йәнә нахаҡлыҡ.

Мин-минлекте аңларға ла мөмкин,
Бер булдыҡлы булһа кешеһе,
Ләкин ғәмәлдә бит мин-минлектең
Булдыҡһыҙҙа була көслөһө:

Бер эште лә үҙе эш итмәй,
Эшләр кешене лә йәшәтмәй.

Әкрәм ағай ғүмер буйы хаҡлыҡ эҙләне. Донъяны тик яҡшы яҡтан ғына күрергә теләне. Кешеләрҙе лә ул тик саф күңелле итеп күрҙе, сөнки уның үҙенең күңеле пак булды, кешеләр тураһында бер ҡасан да насар уйламаны, яуызлыҡ ҡылманы, кешеләргә ул үҙенә ышанған кеүек ышанды.

Эшләр өсөн, һөйөр өсөн үҫтем,
Керһеҙ йөрәгемде шар асып,
Мин донъяны, бөтә кешелекте
Туймаҫ кеүек инем яратып.
Ышанысым шундай камил ине
Яҡшылыҡҡа, яҡты донъяға.
Йәнемде мин фиҙа ҡылған
"Беҙҙә — хаҡлыҡ", — тигән Аллаға.

Халҡыбыҙҙың эскелеккә бирелеүенә лә бик борсолдо ул:

Сараһыҙ мин,
Тарҡау, меҫкен халҡым,
Ирек хисен тамам онотҡан,
Иҙеп, талап сиклекләнгән йәнен,
Араҡыға йыуып онотҡан, —

тип әрней ул. Бәхетһеҙлектең башы — эскелек икәнлеген яҡшы төшөнөп, халыҡты айныҡ тормошҡа саҡыра.

Әкрәм ағай үҙенең тамырын, нәҫел-нәсәбен өйрәнә һәм, "Эйек бөрйәндәре, Туйөмбәт менән Ҡотломбәт" тип исемләп, Бейеш кантон нәҫеленең тарихын яҙып ҡалдыра, ырыуыбыҙ шәжәрәһен төҙөй.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында "Ил аҙабы" тигән роман да ижад итә. Ул тик үҙе вафат булғас, 2009 йылда ғына З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә донъя күрҙе. Уҡыусылар йылы ҡабул итте, тиҙ таралды.

Әкрәм Бейешев заман менән бергә йәшәгән ғалим булды. Ҙур ғилми хеҙмәттәр, шиғырҙар, поэмалар, романдар, хикәйәттәр яҙған ижадсы һәр саҡ ябай, тыйнаҡ, ярҙамсыл булды, халҡым, телем, илем тип янып йәшәне. Төрлө өлкәлә юғары кимәлдә ижад итеп, яҙған хеҙмәттәре өсөн ул хөкүмәт тарафынан бер ниндәй ҙә наградалар түгел, хатта маҡтау ҡағыҙҙары ла ала алманы. Инде 90 йыллыҡ юбилейы еткәс, бәлки баҫылмай ятҡан ҡайһы бер хеҙмәттәре, әҫәрҙәре, ғилми темаға яҙылған мәҡәләләре йыйынтыҡ булып донъя күрә алыр, сөнки уның хеҙмәттәре йәш белгестәр, яҙыусылар, журналистар өсөн бик тә кәрәкле. Бер "Башҡорт теленең һүҙлеге" генә лә ҙур баһаға лайыҡ. Ул һүҙлеге менән Әкрәм ағай башҡорт теленә мәңгелек һәйкәл ҡойҙо.

Уҙыр йылдар, күп быуаттар уҙыр,
Халҡым, бәлки, булмаҫ донъяла,
Ләкин уның теле —
Минең телем,
Мәңгелеккә бөгөн юл ала, —

тип 1975 йылда яҙғайны.

Әкрәм Бейешевтың хеҙмәттәре, ижады тураһында бер генә мәҡәләлә яҙып бөтөрлөк түгел, әммә уның исеме тарих биттәрендә уйылып ҡалды. Былар бөтәһе лә халҡы өсөн ҡалдырған ихлас хеҙмәт емеше, ғүмеренең, йәшәйешенең төп мәғәнәһе булды. Үҙ маҡсатына ирешә, сөнки уның ҡалдырған хеҙмәттәре мәңгелек.